**27- се практик эш дәресе**

**Тема:** Башҡортостандың тәбиғәте. Природа Башҡортостана.

**Башҡарылаcаҡ эш төрҙәре:** исемдәрҙең, һандарҙың төркөмсәләрен өйрәнеү, «Башҡортостан тәбиғәте» темаһына әңгәмәләшеү, һөйләмдәр, текстар тәржемә итеү буйынса практик эштәр башҡарыу.

Наименование работы: выполнение практических заданий на повторение разрядов имен числительных, имен существительных, ведение беседы, составление и перевод предложений на тему «Природа Башкортостана».

**Дәрестең маҡсаты:** башҡорт телендәге исемдәрҙең, һандарҙың мәғәнәләрен, төркөмсәләрен, телмәрҙә ҡулланылышын өйрәнеү нигеҙендә республикаға, уның тәбиғәтенә ҡарата һөйөү тәрбиәләү.

**Ваҡыт нормаһы:** 2 сәғәт. **Дәрестә ҡулланыласаҡ техник саралар:** аудиомагнитофон, мультимедиа проекторы.

**Әҙәбиәт**: 1. Усманова М.Ғ., Солтанғолова З.З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп укытылған башланғыс һәм урта профессиональ белем биреү учреждениелары өсөн. - Өфө: Китап, 2015.

**Техник хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре: 1.**Эште инструкцион -технологик карта буйынса башҡарырға.**2.**Эш урынын таҙа тоторға..**3.**Кеҫә телефонын һүндерергә.

**Инеш инструктаж (письменно)**

**Һүҙлек эше:**

тәбиғәт - природа көнбайыш –запад оҙонлоҡ -длина
майҙан -площадь көнсығыш – восток йыллыҡ - годичный
төньяҡ -север һөтимәр хайуан - млекопитающее
көньяҡ -юг тәрәнлек –глубина биләмә -территория
файҙалы ҡаҙылма- полезное ископаемое ҡиммәтле - ценный
аҫыл таш – драгоценные камни гәүһәр – бриллиант мәрмәр - мрамор
табан балыҡ – карась алабуға – окунь суртан - щука

**Грамматик материал:**

| № | Һан төркөмсәһе | Һорауы | Яһалышы | Миҫалдар |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Төп һан (количественное) | күпме? нисә? сколько? | -- | биш, өс, алты |
| 2 | Тәртип һаны (порядковое) | нисәнсе? который? | **-ынсы,-енсе, -нсы, -нсе, өнсө** | биш**енсе,** өс**өнсө,** алты**нсы** |
| 3 | Йыйыу һаны (собирательное) | нисәү? сколько? | **-ау, -әү** | биш**әү,**өс**әү,** алт**ау** |
| 4 | Бүлем һаны (разделительное) | нисәшәр? по сколько? | **-ар,- әр, -шар, -шәр** | биш**әр,** өс**әр,** алты**шар** |
| 5 | Сама һаны (приблизительн.) | нисәләп? примерно сколько? | **-лап, ләп, -лаған, ләгән** | **бишләп, өсләгән, алтылап** |
| 6 | Кәсер һаны (дробное) | нисәнән нисә? сколько? | **-нан, -нән,-тан, -тән, -дан, -дән, -ҙан,-ҙән** | **1**,14 –бер бөтөн йөҙҙән ун дүрт |

**Эш башкарыуҙың йөкмәткеһе һәм эҙмә – эҙлелеге:**

**1-се бирем. Текст өҫтөндә эш. Вариантлап эшләү:** тексты укығыҙ һәм тәржемә итегеҙ. Текстағы һандарҙы күсереп алығыҙ, төркөмсәләрен билдәләгеҙ (Работа с текстом по вариантам: прочитайте и переведите текст, выпишите имена числительные, определите их разряд, выпишите собственные имена существительные):

**1-се вариант.**

**Башҡортостан тәбиғәте.**

Башҡортостанда 1000- дән ашыу күл бар. Иң ҙурҙары – Асылыкүл, Ҡандракүл. Асылыкүлдең майҙаны 23,4 квадрат километр, тәрәнлеге -8 метр, ә Ҡандракүлдең -15,6 квадрат километр, тәрәнлеге -12 метр. Иң тәрән күл булып Яҡтыкүл һанала. Унын уртаса тәрәнлеге – 30 –лап метр.

Башҡортостандың иң бейек тауы – Ямантау. Уның түбәһенең бейеклеге 1740 метр тәшкил итә. Ә иң оҙон йылғаһы – Ағиҙел. Был йылғаның оҙонлоғо – 1430 километр. Башҡортостандың климаты – континенталь. Ғинуарҙа һауа температураһы – минус 15-ләп, июлдә – плюс 20 –ләп градус тәшкил итә. Һалкындар 110-140 көнгә һуҙыла, 140-147 көн ҡар ята. Йыллыҡ яуым – төшөм күләме – 450 -500 – ләп миллиметр.

**2-се вариант.**

**Башкортостан тәбиғәте.**

Башҡортостан Республикаһының майҙаны – 143,6 мең кв. км., баш ҡалаһы – Өфө. Төньяҡтан көньяҡҡа оҙонлоғо – 550 км, көнбайыштан көнсығышҡа – 430 км. Унда 54 район, 21 ҡала, 4670 – ләп ауыл бар.

Башҡортостан биләмәләренең 38 %-н урман ҡаплаған. Унда 20 төр ағас, 200 төр дарыу үләне үҫә. Урман һәм яландар төрлө ҡоштар һәм хайуандарға ла бай.Унда 250 төр ҡош оя ҡора, шуларҙың 43 төрө бик һирәк осрай. 77 төр һөтимәр хайуандар бар, шуларҙың 33 ҡиммәтле тиреле. Йәнлектәрҙең 26 төрө «Ҡыҙыл китап»ка индерелгән һәм уларға һунар итеү тыйылған.

Тәбиғәт кенә түгел, ер ҡуйыны ла бай республикала. Беҙҙә нефть, газ, күмер, аҫыл таштар, алтын, мәрмәр, гранит, йәшмә, баҡыр һәм башҡалар табыла.

**2-се бирем.** «Башҡортостан» темаһына диалог төҙөгөҙ (Составьте диалог на тему«Башҡортостан»).

**3-сө бирем.** Һандарҙы һүҙҙәр менән яҙығыҙ (Имена числительные напишите словами по образцу):

**567 – биш йөҙ алтмыш ете** **7,8 – ете бөтөн ундан һигеҙ**

1)1254676; 2) 8904; 3) 2675349; 4) 324,16; 5) 43, 257; 6) 483, 210

**4-се бирем.** Һөйләмдәрҙе башҡорт теленә әйләндерегеҙ. Переведите предложения на башкирский язык) **Перевод многих слов имеется в вводном инструктаже – обратите внимание!:** 1.Наша республика богатая и красивая. У нас есть леса, горы, реки, озера. В нашем районе есть шиханы. Одним из них является гора Торатау. Она очень красивая. Рядом с Наумовкой протекает река Ашкадар. В ней водятся караси, окуни, щуки. В наших лесах водятся медведи, лисы, волки, зайцы, кабаны и другие животные и звери.

**Дәрес һөҙөмтәһе:**

1. Студент Башҡортостан тәбиғәте, һандарҙың мәғәнәләрен, төркөмсәләрен, дөрөҫ яҙылышын, һорауҙарын белергә тейеш.
2. Башҡортостан тәбиғәте тураһында әңгәмә алып барырға, һан төркөмсәләрен барлыҡҡа килтерә, уларҙы дөрөҫ рус теленә тәржемә итә, ҡуллана белергә, үҙ фекерен әйтә, эҙләнә һәм һығымта яһай белергә тейеш.

**Контроль һорауҙар һәм биремдәр:**

1.Һорауҙарға яуап бирегеҙ (ответьте на вопросы): Һиңә Башҡортостандың тәбиғәте оҡшаймы? Республиканың тәбиғәте ниндәй? Һин ҡайҙа йәшәйһең? Һин Башҡортостанды яратаһыңмы?

2.Выпишите одушевленные имена существительные: ҡыҙ, дәфтәр, эт, бесәй, кеше, бала, китап, дәрес, дәреслек, бүләк, байрам, икмәк, бүре, айыу, егет, ит.

**Үҙ аллы эш өсөн бирем:**

1. Башҡортостан тәбиғәте тураһында ижади эш төҙөргә. Дәреслектең 234-237-се биттәрен ҡулланырға.
2. Ҡағыҙәне ҡабатларға.

**Эш урынын тәртипкә килтереү:** инструкцион – технологик карталарҙы, дәреслектәрҙе йыйыу.

Уҡытыусы___________ Мөхөтдинова Ф.Р.